# Журналыбыҙҙың "Түңәрәк өҫтәл"е артында, Сибай филармонияһы хаҡында

**Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатов, БР Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры:**

— Сибай филармонияһы асылыуҙа мин туранан-тура ҡатнаштым. Шуға күрә был коллективтың эшмәкәрлеге менән һәр ваҡыт ҡыҙыҡһынып торам. Коллектив ышанысты аҡлап, үҙенә генә хас әҙәби мөхит булдыра алды. Уларҙың һәр ваҡыт эҙләнеүҙәр юлында булыуы һөйөндөрә. Хөкүмәт тарафынан күрһәтелгән иғтибар, ярҙамдың бушҡа китмәүен өр-яңы программалар дәлилләй. Йәш кенә коллективта асыштар, табыштар күп булыуы ла ошо хаҡта һөйләй.

**Хәлил Әбүбәкер улы Барлыбаев, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:**

— Сибай башҡорт филармонияһы — республикабыҙ үҙаллылыҡ алған осорҙа тоҡанған мәҙәни усаҡ. Мине ошо усаҡтың һәр саҡ дөрләп яныуы ҡыуандыра. Һәр тамашала халыҡсанлыҡ, милли рух ярылып ята. Уларҙы халыҡ-ара кимәлдәге визиттарға ла ҡурҡмай ебәреп була. Сибай филармонияһы республика сәнғәтенең йөҙөн асып бирерлек һәләткә эйә.

**Гөлдәр Сабит ҡыҙы Моратова, БР мәҙәниәт министры урынбаҫары:**

— Республикабыҙ филармониялары араһында Сибай филармонияһы үҙенә лайыҡ урын алып тора. Үҙ традициялары, үҙ алымдары бар. Бигерәк тә бейеүҙәре һоҡланғыс. Уларҙың һәр береһенә тәрән мәғәнә һалынған. Халыҡтың гөрөф-ғәҙәттәре, фольклор алымдары оҫта ҡулланыла. Был тәңгәлдә "Сибай" бейеү ансамбле етәксеһе Гөлназ Аҡназарованың фиҙакәрлеген, тырыш хеҙмәтен билдәләп үтергә теләр инем.

**Рәшиҙә Туйсина, республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:**

— Яҡташтарымдың республика сәнғәте күгендә торған һайын ныҒыраҡ балҡыуы һоҡландыра. Сибай филармонияһы халҡыбыҙҙың характерын, йөҙөн, рухи мираҫын саф килеш күрһәтә белә. Уларҙың сығыштарын ҡарағас, башҡорт халҡының көслө философ булыуына тағы бер ҡат инанаһың.

**Земфира Тимерхан ҡыҙы Әбделманова, Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры:**

— Сибай филармонияһы артистарының күбеһе — минең элекке уҡыусыларым. Улар, башлыса, ауылдан килгән студенттар ине. Сибай филармонияһы башҡаларҙан ни ере менән айырыла? Минә ҡалһа, унын уңышы директор менән художество етәксеһенең ижади дуҫлығында, етәкселеге — ижади ихлас хеҙмәттәшлектең бик матур өлгөһө.

**Римма Шәһит ҡыҙы Шакирова, Стәрлетамаҡ филармонияһының художество етәксеһе:**

— Сибай филармонияһы менән беҙҙең мөнәсәбәттәр бик яҡшы. Уларҙы ла, беҙҙе лә, игеҙәктәр кеүек, "СДФ" тип йөрөтәләр. Сибай филармонияһында Стәрлетамаҡ культура-ағартыу училищеһын тамамлаусылар ҙа етерлек. Сибай еренең талантарға бай булыуы һоҡландыра. Бының шулай булыуы, бер уйлаһаң, ғәжәп тә түгел: юҡҡамы ни ул яҡтарҙы Башҡортостандың бишеге тип йөрөтәләр.

**Әхәт Әхмәт улы Фәсхетдинов, Нефтекама филармонияһы директоры:**

— Мин үҙем ошо яҡ кешеһе булараҡ, Сибай филармонияһы менән һәр саҡ ҡыҙыҡһынып торам. Артистарҙың профессиональ үҫеше һөйөндөрә. Сибай филармонияһына бынамын тигән бина бирелгән, ҡала хакимиәте ярҙам ҡулын һуҙырға әҙер тора. Филармония хаҡлы рәүештә популярлыҡ менән файҙалана, уларҙың концерттарын хатта сит ил тамашасыһы ла яратып ҡарай. Халҡының һөйөүе менән һуғарылған тупраҡ ҡына ошондай сағыу таланттарҙы тыуҙырыу һәләтенә эйәлер.

**Мәрфуға Әмирова, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Дүртөйлө ҡалаһы:**

— Башҡортостандың иң төпкөл ҡалаларының береһе — Сибайҙа дәүләт филармонияһы булыуы бик шатлыҡлы ваҡиға. Филармония коллективына киләсәктә лә милли мәҙәниәтте күтәреү өҫтөндә шулай уҡ уңышлы эшләүҙәрен, тағы ла сағыуыраҡ ижад итеүҙәрен теләйбеҙ. Ошондай ауыр заманда төрлө мәҙәни усаҡтар асыу мөмкинселеге тапҡан республика етәкселегенә рәхмәт.

**Фирүзә Еникеева, Санкт-Петербург ҡалаһы:**

— Был тиклем үк бай концерт программаһын күптән күргән юҡ ине. Татарстан артистары беҙгә йыш килә, Башҡортостандан һирәк киләләр. Иҫ киткес тамаша күреп, бейеүселәргә, йырсыларға хайран ҡалып ултырҙыҡ. Башҡорттар борондан мәҙәни йәһәттән бай булғандар, костюмдар ниндәй! Сибай филармонияһының концертын сәхнәнән халыҡҡа ағылған аҡ нурға, һыуһын ҡандырыр милли моң шишмәһенә тиңләр инек.

**Розалиә Солтангәрәева, филология фәндәре кандидаты:**

— "Бәндәләргә иман күндер,
Ер бишегем Арҡайым", тигән тамашалары менән баш ҡалабыҙға килеп, хәтеребеҙҙе яңыртып, тарихи тамырҙарыбыҙҙы, йоҡлаған милли зиһенде, рухты ҡуҙғатып ебәрҙе сибайҙар.

Әлеге тамаша ифрат етди, ифрат ҙур атаманы халыҡҡа сығара. Изге ут, изге усаҡ янына Арҡайымда йәшәүселәр йыйылған. Изге ҡала менән мәңгелеккә хушлашыу төнө... Иртәгә улар ташлап китә... Һәм ошо усаҡ янында һуңғы майҙан — сәнғәт бәйгеһе, өмөт һәм өмөтһеҙлек, үлем һәм тормоштоң һин кем дә мин кем тигән бәхәсе бара. Ошо уҡ майҙанда башҡорттоң тәбиғәт балаһы булып нисек бар донъяны шулай ҡабул итергә тырышыуы — әммә заман ҡалыбына һыя алмай айҡашыуы ла... Ҡояш, Ер, Һыу, Ут тәңреләренән ғәфү алып, XXI быуатҡа инер алдынан рухи яңырыу алып яңы ант ҡағыуы ла бар. Баш күтәреүгә түгел, башты күтәреүгә өндәп, башҡортто дер һелкетер оран да бар. Тамаша түгел — вулкан лаваһы, сәбәкәйгә күндереп кенә ултырыу түгел, һәр эпизоды айырым бәрәкаллалап тороуға яҙған илаһи катарсис йолаһы булды ул. Тамашасының һәр ҡайһыһын һиҫкәндереп, уйландырып, бер тынала үҙен әллә нисә дәүер вәкиле итеп тойҙороп, шул уҡ ваҡытта ошо заман башҡорттоң һуңғы төнө булмаһын өсөн һәр бәндәһен яуаплы итеп торорға бурысын иҫенә төшөргән эпик йөкмәткеле күренеш булды ул. Быуаттарҙың фажиғәһе киләсәк быуындарҙың именлеген ҡурсалай. Былар барыһы ла туфан булып сәхнәгә ҡалҡты.

Быңдайын уй-фекерле тамаша сәхнәгә һыймай кеүек. Уны сәхнәгә сығарыу иҫ китерлек һоҡланыу һәм икеләнеү, хатта хәүефләнеү сиктәрен дә билдәләй. Әле бер кем дә сәхнәгә сығарырға баҙнат итмәгән проблеманы проблема итеп күтәрергә күпме маһирлыҡ, батырлыҡ, ололоҡ кәрәк, шулай булғас, афарин, сибайҙар, тиергә ҡала.

*Сибай дәүләт филармонияһы хаҡындағы материалдарҙы Таңсулпан Ғарипова әҙерләне.*